# *Заманса уйындар һәм уларҙың балалар үҫешенә йоғонтоһо*

Хәҙерге заман культураһы балаларға актив рәүештә тьәҫир яһай. Был яңы эстәлекле уйындар барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Уйын тематикаһы , йөкмәткеһе, уйын менән ҡыҙыҡһыныу үҙгәрә. Тардицион булған уйындар менән бер рәттән яңы уйындар актив рәүештә барлыҡҡа килә. Шулай, өлкәндәр һәм мәктәпкә әҙерлек төркөмө балаларының уйындарында йондоҙ һуғыштары тематикаһы, монстрҙар көрәштәре, йыһан сәйәхәте, тотҡондарҙы бикләү һ б. йөкмәткеле уйындар күҙәтелә. Быларҙың барыһын да бала телевизорҙан күрә һәм уйында тормошҡа ашыра. Барби ҡурсаҡтары, электрон уйынсыҡтар менән ҡыҙыҡһыныу көсәйә. Был – балаларҙың уйындарында яңы күренеш. Был күренеш тәрбиәселәрҙән балаларҙың ҡыҙыҡһыныуҙарын өйрәнеүҙе һәм уйынды кәрәкле һәм файҙалы йүнәлештә алып барыуҙы талап итә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күп кенә тәрбиәселәр һәм ата - әсәләр уйындарҙың был йүнәлештәге үҙгәрешенә әҙер булмауҙарын белдерҙеләр. Улар яңы уйын сюжеттарын тәбрикләмәйҙәр, уйнауҙы бөтөнләй тыялар. Өлкәндәрҙең был позицияһы эффектив түгел, сөнки социаль ориентацияның яңы төрҙәрен һәм яңы уйын тәжрибәһенең мөмкинселектәрен бөтөнләй инҡар итә.

Уйын эшмәкәрлегендә балаларҙың бер – береһе менән аралашыу үҙенсәлектәре.

Уйын барышында балаларҙың социаль – мәҙәниәтле үҫеш күҙлегенән сығып аралашыу мәҙәниәтен күҙәтеү кәрәкле һәм мөһим сара булып тора. Уйын арауығының бөтөнлөгө уйында ҡатнашыусыларҙың берлеге нигеҙендә барлыҡҡа килә. Был инде дөйөм уйын фекеренең фундаменты булып хеҙмәт итә. Һөҙөмтәлә уйын бергә эшмәкәрлек формаһында бара.

Коллектив уйын үҙ регуляциялы уйын булып үҫешә. Бергә уйнағанда уйнаусыларҙың үҙ – ара килешеүе көҙтелә. Шулай ҙа тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: уйын барышында аралашыу ваҡытында гел генә гармония булмай. Шуның өсөн дә инде педагогтың иң төп бурысы – уйын өсөн кәрәле шарттар булдырыу.